Башҡортостан Республикаһы Учалы районы муниципаль районының
муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы
Мәсҡәү ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

**«ЕВРОПА – АЗИЯ. ОФОҠТАРҘЫ АСЫП БАРАМЫН» IV ТӨБӘК - АРА ҒИЛМИ – ҒӘМӘЛИ КОНФЕРЕНЦИЯҺЫ**

# Комбайнсы Әхмәҙиә Байрамғәлин

Учалы районының 90 йыллығына арналған




Тикшеренеү эше авторы:
**Байрамғәлин Радмир**
Башҡортостан Республикаһының
Учалы районы Мәсҡәү урта
мәктәбенең
5-се класс уҡыусыһы

Етәксеһе: **Мәүлитова Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы**,
Башҡортостан Республикаһының
Учалы районы Мәсҡәү урта
мәктәбенең
башланғыс кластар уҡытыусыһы

# Инеш

Райондың ҡатмарлы тәбиғәт шарттарына ҡарамай, сәсеү майҙанынан тонналап иген үҫтереп алыусы комбайнсыларға мин дан йырлайым. Улар районыбыҙҙың ғына түгел, Башҡортостаныбыҙҙың сәскә атыуына башҡарған эштәре менән данлы.

Мәҡәләмдең геройы ла – Учалы районы “Байрамғол совхозы”ның арҡа һөйәген тәшкил иткән һәйбәт кешеләрҙең береһе, Мәҫкәү ауылының ялан батыры, олатайым Әхмәҙиә Әхмәтғәли улы Байрамғәлин тураһында булыр



**Тикшеренеү эшенең актуаллеге.** Армиянан ҡайтҡаны бирле тыуған ауылында эшләгән эшһөйәр хеҙмәт кешеһенә дан йырлау.

**Тикшеренеү маҡсаты.** Алдынғы комбайнсының тормош юлын өйрәнеү, артабан уның яҙмышы нисек булған, ҡыҙыҡһыныу.

**Тикшеренеү эшенең бурыстары.**

1. Комбайн штурвалы артындағы тормошто күҙәтеү
2. Алдынғы комбайнсының илебеҙҙең сәскә атыуына индергән өлөшө
3. Комбайнсының тормош юлы өлгөһөндә үҫеп килгән быуында патриотик тәрбиә биреүҙе көсәйтеү.

**Тикшеренеү мәсьәләһе.** Хәҙерге йәштәрҙең ер эше менән ҡыҙыҡһынмауы һәм хеҙмәт батырҙарын белмәүе.

**Тикшеренеү эшенең гипотезаһы.** Был эшем Учалы районының үҫешенә тос өлөш индергән хеҙмәт батырҙары тураһында белергә ярҙам итәсәк, уҡыусылар ҡара ер эше менән ҡыҙыҡһынасаҡтар һәм үҙенең ялан батырҙары тураһында күп белергә ынтыласаҡтар, яҡташтары менән ғорурланып йәшәйәсәктәр, уларҙың эштәрен дауам итәсәктәр.



# І бүлек. Тыуған иленең тоғро кешеһе

## 1. Әхмәзиә Әхмәтғәли улының биографияһы

Байрамғәлин Әхмәзиә Әхмәтғәли улы 1937 йылдың 15 мартында Учалы районы Мәскәү ауылында тыуған. Алты малай һәм бер ҡыҙлы ғаиләлә икенсе малай булып үҫкән. Атаһы, Байрамғәлин Әхмәзғәли Байрамғәли улы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны булған. Ул һуғыштан алған яраларынан оҙаҡ йәшәмәгән, 1977 йылда донъя ҡуйған.








Һуғыш бөткәндә олатайым Әхмәзиәгә бары һигеҙ йәш була. Һуғыштан һуң ауыр йылдар булғас, олатайыма алты класс белеме менән ҡалырға тура килә. Ғаиләне аслыҡ йылдары ныҡ ыҙалата. Шуға күрә күп ваҡытын атаһы менән балыҡҡа йөрөп үткәрә. Үрге Урал ҡалаһына кәмә менән барып, балыҡ һатып, аҡса эшләр булғандар. Аслыҡтан һунар эше лә ныҡ ярҙам иткән. «Ҡуян, төлкөнөң иҫәбе - һаны булманы, мылтыҡ менән атып алыр инек, тоҙаҡҡа эләгер ине”, тип хәтерләр булған олатайым. Шуларҙы эш итеп, тамаҡ ялғағандар, кейем теккәндәр, уҡыу-кәрәк яраҡтары алғандар.





(фотолар интернеттан алынды)

# 2. Уҡыу, әрме һәм эш башлаған йылдары

Олатайым Әхмәҙиә Байрамғәлин 1958 йылдың 5 июнендә Вознесенскиҙә Учалы ауыл хужалығы училищеһын тамамлап, механик-комбайнсы профессияһына эйә була.





1960 йылдың 21 ғинуарында киң профилле тракторист-машинист һәм слесарь аттестатын ҡулына ала һәм июнь айынан Байрамғол совхозының туғыҙынсы фермаһында комбайнсы эшен башлай. Тырыш эше өсөн йәш егет 1961 йылдың 15 авгусында икенсе класлы СК-3 комбайнсыһы исемен яулай.





Главное управление трудовых резервов при Совете Министров СССР

АТТЕСТАТ

№ 1987

Выдан гр. Байрамгалину Ахмадие Ахметгалеевичу

в том, что он окончил училище механизации сельского хозяйства № 8

(наименование училища)

г. В-Уральск, Челябинской области

(города, области, края, республики)

по специальности тракториста – машиниста широкого профиля

Решением экзаменационной комиссии

гр. Байрамгалину А.А.

присвоена квалификация тракториста-машиниста широкого профиля и слесаря

(специальность, разряд, класс)

Председатель экзаменационной комиссии

Директор училища

М. П. Выдан 21 января 1960 г.

За время обучения в училище с 16 - II 195

по 21 января 1960 г.

гр. Байрамгалин А.А.

изучил нижеперечисленные предметы и получил по ним следующие оценки:

| Наименование предмета | Оценка (прописью) |
|---|---|
| Политзанятия | три |
| Чтение чертежей | пять |
| Основы агрономии | пять |
| Тракторы | пять |
| Сельхозмашины | четыре |
| Комбайны | четыре |
| Механизация | четыре |
| Слесарное дело | пять |
| Ремонт | четыре |
| Физическое воспитание | четыре |
| Производственная практ. | пять |
| Поведение | пять |
| Выпускные квалификационные экзамены сданы с оценкой | четыре |

Зам. директора училища по учебно-производственной работе

Зак. № 723. Тираж 100 000.

Тип. Трудрезервиздата. Москва, Хохловский пер., 7.



УДОСТОВЕРЕНИЕ
ТРАКТОРИСТА-МАШИНИСТА
ТРЕТЬЕГО КЛАССА

Место для фото

В № 952734

М. П.

Фамилия

Имя

Отчество

Стаж с 19 г.

Личная подпись

Имеет право работать на тракторах всех марок, агрегатируемых с ними орудиях и на комбайнах всех марок.

Выдано аттестационной комиссией

(наименование учреждения, выдавшего удостоверение)

Белорецкий район

(район)

Баш. АССР

(область, край, республика)

на основании протокола № 5

от 12 апреля 1964 г.

Председатель аттестационной комиссии (подпись)

М. П. Секретарь (подпись)

Выдано 23 апреля 1964

Гознак. Москва. 1962.

Ошо йылдың көҙөндә, 5 октябрҙә, ураҡ бөтөү менән, 24 йәшлек егетте, **Совет Армияһы сафына** алалар. Ул, Тыуған ил алдындағы бурысын тоғро үтәп, 1964 йылдың 28 ғинуарында тыуған ауылына эшкә ҡайта.





Әрмелә лә тик ятмай, 1963 йылда өсөнсө класлы тракторист – машинист танытмаһын уҡып ала. Ефрейтор Әхмәҙиә Әхмәтғәли улы әрмелә икенсе класлы радиотелеграфист һөнәренә лә эйә була.





УДОСТОВЕРЕНИЕ

классного специалиста Вооруженных сил СССР

Серия ______ №______

Воинское звание ефрейтор

Фамилия, имя, отчество Байрагалин Ахмади Ахмедлеевич

Командир части (корабля)

полковник

(звание, подпись)

«29» января 1964 г.

Наименование квалификации и класс при выдаче удостоверения

радиотелеграфист второго Кл.

Присвоен приказом в/части 71592

№ 0310 от 31 октября 1963 г.

Командир части (корабля)

М. П. полковник

(звание, подпись)

«29» января 1964 г.



# II бүлек. Ялан батыры

## 1. Алдынғы комбайнсының ғаиләһе

Ауылына ҡайтып эш башлағас та атаһы улын өйләндерә. Бәләкәй генә булһа ла Яйыҡ яры буйына йорт һалып керәләр. Өләсәйем, Әҡлимә Алсынбай ҡыҙы Бүләкова, тәүге никахынан булған улы Алим Алмас улы менән Байрамғәлиндар ғаиләһенә йәшәргә киләә.





Олатайым үҙ ғаиләһен булдырған йылды, 1964 йылдың ноябрь айында, партияға керә (партия билеты 10213243 номерлы). Йәш ғаилә тырышып йәшәй, ауылы өсөн көсөн биреп эшләй, иле өсөн икмәк үҫтерә.



ПАРТИЙНЫЙ БИЛЕТ
№ 10213243
Фамилия Байрамгалин
Имя Ахмадий
Отчество Ахметгалеевич
Год рождения 1937
Время вступления в партию Ноябрь 1964 г.
Наименование партийного органа, выдавшего билет Учалинский горком КПСС Башкирской АССР
(Личная подпись)
М. П. Секретарь партийного комитета
Дата выдачи 19 марта 1974 г.

УПЛАТА ЧЛЕНСКИХ ВЗНОСОВ
1974 год

| Месяц | Месячный заработок | Сумма взноса | Подпись секретаря |
|---|---|---|---|
| Январь | | | |
| Февраль | | | |
| Март | | | |
| Апрель | 104 | 1-04 | [illegible] |
| Май | 102 | 1-02 | [illegible] |
| Июнь | 91 | [illegible] | [illegible] |
| Июль | 92 | 046 | [illegible] |
| Август | 154 | 2-31 | [illegible] |
| Сентябрь | 112 | 1-12 | [illegible] |
| Октябрь | 159 | 3-29 | [illegible] |
| Ноябрь | 125 | 1-25 | [illegible] |
| Декабрь | 122 | 1-22 | [illegible] |





# Балалары

Олатайымдың эшен биҙәп, бер-бер артлы балалары тыуа тора: 1965 йылда Азат улы, 1967 йылда Зилдә ҡыҙы, 1968 йылда Гөлсирә ҡыҙы, 1970 йылда Вәсилә ҡыҙы (1 ай йәшәп үлә), 1972 йылда Ришат улы, 1974 йылда Зәмирә ҡыҙы, 1977 йылда Зинира ҡыҙы, 1981 йылда Зиләрә ҡыҙы донъяға килә. Шулай итеп, олатайым менән өләсәйем бергә һигеҙ бала ҡарап үҫтерәләр.







1968 йылдарҙа, йәшәгән йорттарын, кешеләр менән бергә йәшәйек тип, урамға күсерәләр. «Ике өләсәйҙең ҡаршыһында йәшәнек, уларҙың ярҙамын күп күрҙек, тип һөйләй хәҙер Зилдә әбейем.







1972 йылда олатайым профсоюз сафына баҫа. Ҡышын тракторҙа фермаға бесән, һалам һөрәтһәләр, тиҙәк түкһәләр, халыҡҡа урмандан утын ташыһалар, йәйен бесән эшләйҙәр, яҙын - көҙөн комбайнда икмәк үҫтерәләр.










“Атайымды өйҙә бик һирәк күрер инем. Сөнки, элек концерт менән сығыш яһап, смотр - конкурстар көслө булды. Эштән ҡайтып, ишектән кереп тә өлгөрмәҫ ине, берәй түрә, машинаһы менән килеп туҡтап, атайымды матур ке-йендереп, алып сығып та китер ине”, тип хәтерләй унын ҡыҙы Зилдә әбейем.



Сөнки, олатайым башҡорт ҡоралы - скрипкала оҫта уйнаған, моңло тауышы менән матур йырлаған. Шуға уға бер ҙә тынғы булмаған. Эш араһында ул сәхнәнән төшмәгән. Әлбиттә, һәр бер конкурстан, концерттан, һабантуйҙан бүләк (будильник йә ҡул сәғәте, сервиз, картина, күлдәк һ. б.) менән ҡайтыр булған олатайым. Йә булмаһа, конверт эсендә аҡса алып ҡайтҡан.

“Шулай матур йәшәгәндәр, тип уйлайым, хәҙер иҫкә алһам. Ауылда ла элек ҡунаҡ саҡырышыу, туйҙар  көслө булды.  Атайымды ҡунаҡҡа скрипкаһы менән бергә саҡырырҙар ине.  Ҡунаҡтың ҡото булып йөрөгән икән атайым”, тип һөйләй хәҙер Зилдә әбейем.





# Социалистик ярыштар

Барыһына өлгөр олатайым 1974 йылда социалистик ярышта Еңеүсе булған. Уның ошо йылда алған миҙалы ғына һаҡланған, ҡалған миҙалдары юҡ, ниңәлер. Шулай уҡ, ул бер-нисә йыл рәттән еңеүсе булып, комбайнына ҡаҙап, Ҡыҙыл Вымпелдар менән ҡайтҡан.


АУ 214381
„ПОБЕДИТЕЛЬ СОЦИАЛИСТИЧЕСКОГО СОРЕВНОВАНИЯ 1974 ГОДА"

1974
ПОБЕДИТЕЛЬ СОЦСОРЕВНОВАНИЯ

Знак учрежден
Центральным Комитетом КПСС,
Советом Министров СССР,
ВЦСПС и ЦК ВЛКСМ

УДОСТОВЕРЕНИЕ

Байрамгалин
Ахмадея
Ахметгалеевич

награжден знаком
„ПОБЕДИТЕЛЬ СОЦИАЛИСТИЧЕСКОГО СОРЕВНОВАНИЯ 1974 ГОДА"

Постановление Совета Мини-
стров Баш. АССР
и президиума Баш-
облсовпрофа от
„10" января 1975

(подпись) (подпись)







За
высокие
показатели
в
социалистическом
соревновании


Лучшему
КОМБАЙНЕРУ




За
высокие
показатели
в
социалистическом
соревновании

Эше һәр ваҡыт маҡтаулы булған, гәзит биттәрендә лә олатайым тураһында ҡыуанып уҡып торғандар.



## Комбайнсы Әхмәҙиә

Учалы районы «Байрамғол» совхозының арҡа һейәге, тәбиғи, эшһөйәр хеҙмәт кешеләре, дәртле сәхнә оҫталары, бер һүҙ менән әйткәндә, һәйбәт кешеләр тәшкил итә. Бына шундайҙар араһында совхоздың Мәскәү бүлексәһе комбайнсыһы Әхмәҙиә Әхмәтғәли улы БАЙРАМҒӘЛИН да бар. Комбайн штурвалы артында ул 1959-йан бирле. Ҡыш — тракторҙа. «Үҙ ғүмеремә 4 комбайнды туҙҙырҙым инде. Һуңғыһында туғыҙынсы сезон эшләйем», — ти Байрамғәлин иптәш. Ә хеҙмәт юлын механизаторҙар курсын тамамлағас, Ҡаҙаҡстанда, сиҙәм үҙләштереүҙә башлап ебәргән, һуңынан Совет Армияһында хеҙмәт иткән һәм һуңғы штрих: «Армиянан ҡайтҡандан бирле ошонда — тыуған ауылымда эшләйем. Бер ҡайҙа ла киткәнем юҡ!» Былары — һүрәт «геройы» Әхмәҙиә Байрамғәлин һүҙҙәре...

Расих ЛОҠМАНОВ.

Марат БАЙНАЗАРОВ һүрәте.



Комбайнсы Әхмәҙиә

Учалы районы «Байрамғол» совхозының арҡа һейәге, тәбиғи, эшһөйәр хеҙмәт кешеләре, дәртле сәхнә оҫталары, бер һүҙ менән әйткәндә, һәйбәт кешеләр тәшкил итә. Бына шундайҙар араһында совхоздың Мәскәү бүлексәһе комбайнсыһы Әхмәҙиә Әхмәтғәли улы БАЙРАМҒӘЛИН да бар. Комбайн штурвалы артында ул 1959-йан бирле. Ҡыш — тракторҙа. «Үҙ ғүмеремә 4 комбайнды туҙҙырҙым инде. Һуңғыһында туғыҙынсы сезон эшләйем», — ти Байрамғәлин иптәш. Ә хеҙмәт юлын механизаторҙар курсын тамамлағас, Ҡаҙаҡстанда, сиҙәм үҙләштереүҙә башлап ебәргән, һуңынан Совет Армияһында хеҙмәт иткән һәм һуңғы штрих: «Армиянан ҡайтҡандан бирле ошонда — тыуған ауылымда эшләйем. Бер ҡайҙа ла киткәнем юҡ!» Былары — һүрәт «геройы» Әхмәҙиә Байрамғәлин һүҙҙәре...

Расих ЛОҠМАНОВ.

Марат БАЙНАЗАРОВ һүрәте.

# 3.«Байрамғол совхозы» эшсеһенең даны, наградалары

1975 йылда КПСС-тың VIII Учалы ҡала конференцияһына олатайым Әхмәҙиә Әхмәтғәли улы делегат булып барған. Яҡшы эшләгәне өсөн олатайым Мәскәү ҡалаһына ике мәртәбә барып ҡайтҡан. Санаторий – профилакторийҙарҙа булған. Украинаны ла күргән.








1983 йылда совхоздың спартакиадаһында Беренсе урын яулағаны өсөн комбайнына Аҡ вымпел тағып ҡайтҡан.








1988 йылдың 26 ноябрендә XIII Учалы ҡала партия конференцияһына Байрамғол совхозынан делегат итеп ебәргәндәр.


Пролетарии всех стран, соединяйтесь!

КОММУНИСТИЧЕСКАЯ ПАРТИЯ СОВЕТСКОГО СОЮЗА

МАНДАТ № 175

Тов. Байрамгалин А. А.

избран делегатом на XIII Учалинскую городскую партийную конференцию от первичной партийной организации с-за «Байрамгуловский»

Мандатная комиссия.

26 ноября 1988 года.

КПСС





Һаулығы нык ҡаҡшап киткәс, алдынғы комбайнсы 1991 йылдың ҡышы тағы ла санаторий - профилакторийҙа дауаланған.


КНИЖКА ОТДЫХАЮЩЕГО

№ 151

ПАНСИОНАТ

«ЗЕЛЕНЫЙ БОР»




В-339.

Утверждена Минздравом СССР
04.10.80 г. № 1030
ВЦСПС

САНАТОРИЙ-ПРОФИЛАКТОРИЙ
профсоюзного комитета Белорецкого
ордена Трудового Красного Знамени
металлургического комбината
имени М. И. Калинина 306.

Санаторная книжка

Фамилия Байрамгалин

Имя Ахмадия

Отчество Ахмедгалеевич

Путевка № 2814201

Срок лечения с 24/I по 16/II-91г.

Корпус № палата № 8

Лечащий врач

фамилия

имя, отчество

к-34

к-45

1996 йылда өләсәйем Әҡлимә Алсынбай ҡыҙы үлеп киткәс, өйҙәге эштәр олатайыма ҡалған. Кинйә улын Ришат бабайымды йортло, күҙле - башлы итергә тура килгән яңғыҙына. Иң бәләкәй ҡыҙын, минең әсәйемде, кейәүгә биргән.









**1997 йылдың 27 мартынан ҡартлыҡ буйынса хаҡлы ялға сыҡҡан. 1998 йылда Хеҙмәт ветераны кенәгәһен ҡулына алған.**



Башкортостан
(республика, край, область)
Учалинский
(районный, городской, отдел (управление) социальной защиты населения)

УДОСТОВЕРЕНИЕ № 214381

Фамилия получателя Байрамгалин
Имя Ахмадия
Отчество Ахмедгалеевич
Год рождения 1937

Подпись получателя

Пенсия назначена по старости, по инвалидности ___ гр., по случаю потери кормильца на ___ членов семьи, за выслугу лет в соответствии со ст. ___ Закона РСФСР "О государственных пенсиях в РСФСР" из среднемесячного заработка

___ руб. ___ коп.

в размере ___ руб. ___ коп.

276017 руб.
(прописью)

Пенсия назначена 04.11 1996 г.
по пожизненно 199_ г.
Удостоверение выдано 17.3 1997 г.

Заведующий отделом
Начальник управления

М.П.





Тик олатайыма хеҙмәт емештәренең тәмен татып, уҡытып, үҫтергән балаларының изгелеген күреп оҙағыраҡ йәшәргә яҙмаған. Тракторсыларҙың көнө-төнө саң йотоп, ауыр эштәренән алған профессиональ ауырыуы олатайымды ла ыҙалатҡан. Олатайым, алдынғы комбайнсы Әхмәҙиә Байрамғәлин, **2006 йылдың 8 мартында** яҡты донъя менән хушлашҡан.





Уның йортонда, нигеҙен ҡоротмаҫ өсөн, тырышып Азат улы йәшәй. Ул да атаһы һымаҡ комбайнда эшләй. Уның юлын ҡыуа.



Балалары тырыш, эшләп көн күрәләр. Оло ҡыҙы Зилдә Әхмәҙиә ҡыҙы ауылында мәктәптә уҡыта. Гөлсирә ҡыҙы Өфөлә шәфҡәт туташы булып эшләй. Ришат улы Белорет ҡалаһында йәшәй. Зинира ҡыҙы Магнит ҡалаһында эшләй.









# Йомғаклау




Мин, комбайнсы Әхмәзиә Байрамғәлиндың кесе ҡыҙы – Зиләрәнең улы булам. Учалы районының данлы тарихына, республиканың аҙыҡ-түлек фондына тос өлөш индергән ауыл хужалығы хеҙмәткәре – алдынғы комбайнсы олатайым тураһында һөйләнем. Мин олатайымды белмәһәм дә, уның менән ғорурланып йәшәйем. Уға оҡшарға тырышам. Уның фамилияһын йөрөтәм.



# Кулланылған әҙәбиәт

- «Яйыҡ» гәзите,  №135, 2005 йыл, «Учалы районы»
- «Яйыҡ» гәзите,  №122,  1993 йыл «Комбайнсы Әхмәҙиә»
- Ҡыҙы Зилдә әбейем хәтирәләренән
- Архив  альбомынан фотолар
- Хеҙмәт кенәгәһенән яҙмалар
- Интернет селтәренән фотолар алынды










